РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ МӘҒАРИФ МИНИСТРЛЫҒЫ Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министрлығы МУНИЦИПАЛЬ УЧРЕЖДЕНИЕ БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ БӨРЙӘН РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫНЫҢ МӘҒАРИФ ИДАРАЛЫҒЫ
Башҡортостан Республикаһы Бөрйән районы
Аҫҡар **урта мәктәбенең Брәтәк филиалы**

| | | |
|---|---|---|
| «Ҡаралған» | «Килешелгән» | «Раҫланылған» |
| МБ ултырышында | Директор урынбаҫары: | Аҫҡар урта |
| Етәксеһе: | ________/Мөхәмәтов А.Ә. | мәктәбе директоры: |
| ___Ғиззәтуллина Д. Р. | «30» август 2023 й. | ___ Йәрмөхәмәтов И. И. |
| | | «30» август 2023 й. |

Протокол № 1
«30» август 2023 й.

# «Әҙәби уҡыу» ҙан эш программаһы 2-4 кластар

2023-2024 уҡыу йылы

Төҙөүсеһе: башланғыс кластар уҡытыусыһы
Фәхрийәнова Илһөйәр Мөхәррәм ҡыҙы

## Аңлатма яҙыу

“Әҙәби уҡыу” буйынса программа “Мәғариф тураһында”ғы законға, “Дөйөм белем биреү йөкмәткеһенең фундаменталь үҙәге” документына, “Рәсәй Федерацияһының икенсе быуын Федераль дәүләт хөкүмәт стандарттарына”, “Әҙәби уҡыу” дәреслегенең методик ҡулланмаһына таянып эш программаһы төҙөлдө. Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 2-4-се кластар өсөн тәғәйенләнә.

Уҡытыу – методика комплекты түбәндәге әҙәбиәт менән тәьмин ителә:

- Ә.Т. Мәүлийәрова, Ф.Ш.Сынбулатова. Әҙәби уҡыу. Дөйөм белем биреү учреждениеларының дүртенсе класы өсөн уҡыу китабы. Ике киҫәктә.- Өфө: Китап, 2012.
- Ә.Т. Мәүлийәрова, Р.Ә. Зәйниева “Әҙәби уҡыу” дәреслегенә методик ҡулланма. Өфө : Китап, 2015.
- “Әҙәби уҡыу” дәреслегенә эш дәфтәре. Ике киҫәктә. Өфө : Китап, 2016.

## “Башҡорт әҙәбиәте” предметына дөйөм характеристика

***Кластан тыш уҡыу.*** Башланғыс кластарҙа әҙәбиәт менән таныштырыу кластан тыш уҡыу дәрестәрендә дауам итә.Кластан тыш уҡыу шулай уҡ балаға тәрбиә биреү һәм шәхес үҫтереү сараһы итеп ҡарала.Кластан тыш уҡыуҙың маҡсаты-уҡыусыларҙы хәҙерге көндәге балалар әҙәбиәте менән һәр яҡлап таныштырыу,китапҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм үҙ- аллы даими уҡыу күнекмәһе булдырыу.Уҡытыусы ярҙамында балалар республикала сыҡҡан "Йәншишмә" гәзите, "Аҡбуҙат", "Аманат "журналдары менән танышып, даими уҡып баралар.

***Һүҙҙәр менән эш***. Уҡыусыларҙы дөрөҫ һөйләргә,аныҡ һәм тасуири уҡырға, һүҙҙе урынлы ҡулланырға өйрәтеү,уларҙың һүҙ байлығын арттырыу,һүҙбәйләнештәр,фразеологик берәмектәр,һөйләм,бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш уҡыу дәрестәрнең төп йөкмәткеһен тәшкил итә.

***Тел күнекмәләре араһында һүҙлек эше***, һөйләмдәр,ябай хикәйәләр төҙөү, уҡығанды дөрөҫ итеп һөйләү ҙур әһәмиәткә эйә. Шуға ла тексты уҡыу алдынан йәки уҡытыусының тәүге ҡат уҡыуынан һуң,ундағы яңы һүҙҙәр,фразалар, һөйләмдәр аңлатыла,һүҙлек эше үткәрелә. Әҫәрҙе өлөшләп,һайлап, роллэп ,сылбыр буйынса уҡыу, йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү, әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләү кеүек эштәр башҡарғанда ла һүҙлек эше иғтибар үҙәгендә тора.

*“Башҡорт әҙәбиәте”* – башланғыс белем биреүҙә төп предметтарҙың береһе. Уҡыу - телмәр эшмәкәрлегенең бер төрө. Уҡыу дәрестәренең маҡсаттары-уҡыусыларҙа аңлы, йүгерек, тасуири уҡыу күнекмәләре булдырыу,үҙаллы уҡыу тәжрибәһен формалаштырыу, телмәр эшмәкәрлегенең бар төрҙәрен камиллаштырыу;текст һәм китап менән эшләү оҫталығын тәрбиәләү, башланғыс кластарҙа уҡ уҡыусыларҙа китап уҡырға ынтылыш тыуҙырыу, уларҙы дөрөҫ итеп китап һайларға, әҙәби әҫәрҙәрҙе анализларға өйрәтеү; һүҙ сәнғәтенә дөрөҫ мөнәсәбәт формалаштырыу, әҙәби текстар аша уҡыусыларҙың әхлаҡи тәжрибәһен байытыу, ижади һәләттәрен үҫтереү. Башланғыс кластарҙа “Башҡорт әҙәбиәте” дәрестәренең төп маҡсаты булып уҡыусыларҙың уҡыу компетентлығын формалаштырыу һәм китап уҡыу эшмәкәрлеген үҙаллы белем алыу сараһы итеп үҫтереү тора. Ошонан сығып, уҡыу дәрестәренең бурыстары түбәндәгесә билдәләнә:уҡыусыларҙы әҙәбиәт донъяһына алып инеү һәм һүҙ сәнғәтенең образлылығын, әҙәби әҫәрҙәрҙең рухи асылын аңларға өйрәтеү;әҙәби әҫәрҙе автор менән аралашыу өсөн уҡыу, уның позицияһын, яҙылғанға мөнәсәбәтен асырға өйрәтеү;бер үк әҫәрҙе яҙыусы, уҡыусы, әҙәби критик күҙлегенән тикшерергә өйрәтеү;төрлө жанрҙағы әҙәби әҫәрҙәр

менән таныштырыу; әҙәби әҫәрҙәр аша укыусыларҙың хис-тойғоларын байытыу;әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡыу барышында укыусыларҙы әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләренә өйрәтеү, әхлаҡи ҡиммәттәр формалаштырыу;

Шуны ла күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк: башланғыс кластарҙа "Башҡорт әҙәбиәте" дәресенең *төп бурысы* булып укыусыларҙың *укыу техникаһын һәм укыу тиҙлеген үҫтереү* тора.

Әҙәби әҫәрҙе ҡабул итеү укыусының тормош тәжрибәһенә бәйле, шуға күрә әҫәрҙә барған хәл-ваҡиғаларҙы ул иң элек үҙенә үлсәп ҡарай , үҙенең фекерен әҫәр геройыныҡы менән сағыштыра, донъяны аңлау кимәленә таянып образ тыуҙыра, барыһын да үҙ аңы аша үткәрә. Уҡыусыға әҫәрҙең төп фекере тәү тапҡыр уҡығанда аңлашылып та бөтмәҫкә мөмкин. Уны яңынан укығанда күҙ уңынан төшөп ҡалған өлөштәре лә иғтибарға алына һәм икенсерәк күҙлектән ҡабул ителә. Шуға күрә әҫәрҙе аңлау, ҡабул итеү өсөн ваҡыт кәрәк.

Тасуири укыу – әҫәрҙе аңлы ҡабул итеүҙә ҙур ярҙамсы, сөнки геройҙарҙың төрлө кисерештәре, авторҙың йөкмәткегә мөнәсәбәте, әҫәрҙең теле тасуири укыу барышында уҡыусыға тағы ла нығыраҡ тәьҫир итә, аңлауҙы еңеләйтә. Тасуири уҡырға укыусылар иң элек уҡытыусыһына оҡшатып укып өйрәнәләр, артабан был күнекмә үҙ аллы укыу барышында камиллаша бара.

Дәрестәрҙә уҡыусыларҙың күңеле төрлө кисерештәр менән дә байырға тейеш: уҡылған әҫәрҙән баланың күңеле үҫә йәки, киреһенсә, кәйефе кителә,герой эшләгән яҡшылыҡтан ҡәнәғәтлек кисерә, яманлыҡтан йәне көйә. Шуға күрә укытыусылар ҙа, ата-әсәләр ҙә балаларҙы тирә-йүнде күҙәтергә, күргәндәрҙе анализларға, һығымта яһарға өйрәтергә бурыслы. Ошоға бәйле укыусылар әҙәби әҫәрҙәрҙе тормоштоң сағылышы итеп ҡабул итергә өйрәнәләр., 2010.

***Программа 68 сәғәткә (аҙнаһына 2 сәғәт) иҫәпләнгән.***

## Әҙәби укыу дәрестәренең бурыстары

Илдәге социаль-экономик күтәрелеш һөҙөмтәһендә социаль шартттарҙың тамырынан үҙгәреүе мәғариф өлкәһенә яңы талаптар ҡуя. Баланы яңы социаль шарттарҙа бөтә яҡтан гармониялы үҫешкән шәхес итеп тәрбиәләү, нигеҙҙә, мәктәпкә йөкмәтелә. Был үҙ аллы фекерләгән, йәшәйешен тейешле кимәлдә ойоштора алған, стандарт булмаған шарттарҙа тормош проблемаларын оптималь хәл итә белгән, ғаиләһе, яҡындары, йәмғиәт алдында яуаплылыҡ тойған һәм рухи яҡтан ныҡлы булған интеллектуаль шәхес итеп тәрбиәләү бурысын ҡуя.

Юғарыла бәйән ителгән бурыстарҙы хәл итеүгә тейешле шарттар булдырыу зарур.Иң төп шарттарҙың береһе- телде өйрәнеү өсөн мөмкинселектәр тыуҙырыу, сөнки тел аралашыу ҡоралы ғына түгел, ә йәмғиәттең йәшәйешен, үҫешен көйләүсе сара булып тора. Үҙеңдең туған телеңде,милләт-ара аралашыу теле булған рус һәм инглиз телдәрен тейешле кимәлдә белеү- ҙур ҡаҙаныш һәм йәшәйешеңде, интеллектуаль үҫешеңде көйләүсе мөһим шарт ул. Шуға күрә,балаларҙы тел ғилеменә өйрәтеү башланғыс кластан маҡсатлы рәүештә ентекләп алып барыла. Уҡыу - фекерләү һәм телмәр эшмәкәрлегенең төп төрҙәренең береһе. Шуға күрә, башланғыс мәктәптә укыу дәрестәре, фән буларак, балаға белем биреү, төрлө яҡлап үҫешен тәьмин итеү һәм тәрбиәләүҙә мөһим урын алырға тейеш.

4-се класта әҙәби укыуҙың беренсе этабы тамамлана. Башҡорт әҙәбиәте буйынса белем биреүҙең тәүге баҫҡысы булған был курс алдында ҡуйылған бурыстар түбәндәгесә билдәләнә:

- Аңлы, етеҙ, тасури укыу; телмәр үҫтереү өҫтөндә күнекмәләрҙе дауам итеп, алған белемде системаға һалыу, артабан киңәйтә барыу;
- Уҡыусыларға айырым әҫәрҙәрҙе аңларға ярҙам итеү маҡсатында авторҙар тураһында биографик белешмәләр биреү;

- Әҙәбиәт теорияһынан тасуирлау, сағыштырыу, йәнләндереү, синоним, антоним, омонимдар, әкиәттәр, мәҡәлдәр, йырҙар, биография, мәҫәл, эпитет терминдары тураһында төшөнсәләрҙе тәрәнәйтеп өйрәнеү һәм нығытыу.

Ғөмүмән, башланғыс класс уҡытыусыһы алдында ҡуйылған бурыстарҙың иң мөһиме – тексты уҡыусыларға эмоциональ йоғонто яһарлыҡ итеп тасури уҡып, әҙәби әҫәрҙе ҡабул итергә ярҙам итеү, уҡыусыларҙы образдар донъяһына алып инеү.

Уҡыу дәрестәренең төп маҡсаты- китап уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу, уҡыу техникаһын камиллаштырыу, балаларҙы китап уҡыуға ылыҡтырыу, һөйләү һәм аралашыу телмәрен үҫтереү, үҙ аллы ижад итеүгә мөмкинселектәр, шарттар булдырыу.

Был мөһим бурыстар программаға индерелгән материалдар, донъя һәм башҡорт әҙәбиәтенән һайланып, художестволы һәм фәнни-популяр текстар, шулай уҡ халыҡ ижады әҫәрҙәре ярҙамында ғәмәлгә ашырыла.

**Уҡыу техникаһы.**

Тексты етеҙ, тасуири аңлап уҡыу. Әҫәр йөкмәткеһенә ярашлы хис-тойғоларҙы, уй-фекерҙе белдереп, тауышты көйләп уҡыу. Ҡысҡырып минутына 90-100 һүҙ уҡыу. Эстән уҡығанда минутына  120  һүҙҙән күберәк уҡыу.

## 4 -се класты тамалаған уҡыусының белем һәм уҡыу күнекмәләренә ҡуйылған талаптар.

-әҙәби һөйләү нормаларын күҙәтеп, йылдан-йыл аңлы, дөрөҫ, тасуири уҡырға,

-әҫәрҙе эстән аңлы уҡый белергә,

-китаптың өлөштәрен, йәғни титул битен, йөкмәткеһен, инеш һүҙен, йомғаҡ һүҙен табыу, һылтанмаһын, аннотацияһын айыра белергә,

-үҙ аллы төҙөлгән планға таянып, әҫәрҙең йөкмәткеһен ентекләп,ҡыҫҡартып йәки һайлап,ижади һөйләү күнекмәһенә эйә булырға,

-уҡылған әҫәрҙең темаһын һәм төп фекерен билдәләргә,

-уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләргә, әҫәрҙең исемен, авторын белергә, авторҙың уй-фекерен асыҡларға,

-уҡылған әҫәрҙеңйөкмәткеһен тулы, ҡыҫҡартып, һайлап һәм ижади һөйләү күнекмәһенә эйә булырға,

-уҡылған әҫәрҙе мәғәни яҡтан тамамланған өлөштәргә үҙ аллы бүлергә, улар араһынан төп фекерҙе белдергәнен таба белергә, хикәйәнең, мәҡәләнең планын төҙөргә,

-уҡылған тексты̆ң йөкмәткеһенә нигеҙләнеп, ҡыҫҡа хикәйәләр төҙөргә, яҙырға,ижади эштәр башҡарырға, автор ҡарашынан сығып, уның төп геройына баһа бирә белергә,

-әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә уҡыусының шәхси уй-фекерен, ҡарашын белергә

-әҫәрҙәге геройҙарҙың ҡылығын, холҡон, тәртибен, тойғоһон, уй-фекерен  аңларға, уларҙы бер-береһе менән сағыштырырға,үҙ мөнәсәбәтеңде белдерергә, ҡылыҡһырлама төҙөй белергә.

-шиғырҙы, ауыҙ-тел ижады өлгөләрен тасуири, яттан һөйләй белергә,

-фольклор әҫәрҙәренә миҫалдар килтерә белергә,

-төрлө тематикаға уҡылған әҫәрҙәргә миҫалдар килтерә белергә.

## “Әҙәби уҡыу” предметын өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре

***Метапредмет кимәле***

Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, регулятив һәм коммуникатив

эшмәкрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡыуға, белеем алырға өйрәтеү.

Предмет – ара һөҙөмтәләр түбәндәге талаптарҙан тора:

- әҙәбиәттән, фәнни-популяр мәҡәләләрҙән, белемде арттырырҙай

материалдарҙы, кәрәкле мәғлүмәтте таба алыу;

- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлау һәм текстың төп фекерен асыҡлау;

- үҙеңдең фекереңде, уйыңды әңгәмәсеңә еткерә алыу;

- тирә-йүн, тәбиғәт менән гармонияла йәшәү ҡағиҙәләрен, ысулдарын үҙләштереү;

- йәмғиәттәге тәртип һәм әхлаҡ ҡағиҙәләрен белеү;- аңлы анализлау эшмәкәрлеген булдырыу;

- төркөмдәрҙә эшләүҙең әһәмиәтен аңлау һәм уларҙа эшләү тәртибен үҙләштереү.

***Предмет кимәле***

Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны анализлау һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

Предметы өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре түбәндәгеләр:

- компетенлы уҡыуҙы формалаштырыу;

- уҡыу техникаһын үҙләштереү;

- уҡылған йәки тыңланған әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлау алымдарына эйә булыу;

- интепретацияның төп элементтарын үҙләштереү;

- әҙәби әҫәрҙәрҙе, фәнни-популяр уҡыу текстарын анализлау һәм үҙгәртеү күнекмәләренә эйә булыу;

- ҡыҙыҡһындырған әҙәбиәтте үҙ аллы һайлай алыу;

- һүҙлектәр, белешмәләр менән эш итә белеү;

- үҙеңде ижади эшмәкрлеккә һәләтле, белемле китап уҡыусы итеп тойоу;

- сюжет элементтарын индереп, бәләкәй текстар төҙөү;

- шиғырҙы яттан һөйләү һәм таныш булмаған аудиторияла сығыш яһау күнекмәләренә эйә булыу.

**Уҡытыу һөҙөмтәһендә** башланғыс мәктәптә балала артабан белем алырға әҙерлек, кәрәкле әҙәби үҫеш кимәле булдырыуға теләк уянасаҡ. Был түбәндәге күнекмәләрҙе булдырыуҙы күҙаллай:

- тирә-йүнде өйрәнгәндә туған тел дәресенең тотҡан урынын һәм ролен төшөнөү,
- уҡыуҙың мәҙәниәтле кеше тәрбиәләүҙәге ролен аңлау, шәхси сифаттарҙы һәм
- социаль ҡиммәттәрҙе тәрбиәләү;
- әҙәбиәттең дөйөм кешелек сифаттары тәрбиәләүҙәге әһәмиәтен аңлау
- әҙәби текстар өҫтөндә эстетика һәм әхлаҡ күҙлегенән сығып эш итеү.
- Әҙәбиәттең сәнғәттең бер төрө икәненә төшөнөү, аңлау;
- әҙәби жанрҙы билдәләү, геройға характеристика биреү өсөн анализлау,
- сағыштырыу алымдарын ҡулланыу; тексты һөйләй белеү күнекмәләренә эйә
- булыу;
- үҙеңә кәрәкле информацияны әҙәби, фәнни-популяр, өйрәтеү текстарынан таба
- белеү.

# “Әҙәби уҡыу”ҙан  календарь-тематик план, 2 класс

| № | Дәрестең темаһы | Һүҙлек эше | Сә Ғәт ha Ны | Дата | Факт |
|---|---|---|---|---|---|
| | | **1 сирек** | | | |
| 1 | **Белем байрамы** | Тәбрик итә, сәләмләй, хуш    киләһең. | 1с. | | |
| 2 | **Бишек йырҙары (бала йоҡлатыу). Йәнлектәрҙең бишек йырҙары.** | Бишек, сәңгелдәк, бәүетә, тирбәтә, йондоҙом, былбылым, күҙ нурым. | 1с. | | |
| 3 | **Бармаҡтар менән уйындар. Мөғжизәле бармаҡтар.Һамаҡтар.** | Башбармаҡ, һуҡбармаҡ, урта бармаҡ, сығанаҡ бармаҡ, сәтәкәй бармаҡ, мөғжизә. Һамаҡ, һамаҡлай, ҡашыҡ. | 1с. | | |
| 4 | **Йомро-йомро йомғағым, йомғағымда-йомағым.** | Йомаҡ, йомаҡ  ҡойошоу, оҫта, отҡор, зирәк, ыҫпай. | 1 с | | |
| 5 | **Мәҡәлдәр-ололар һүҙе, ата-бабалар кәңәше, өгөт-нәсихәте, аҡһаҡалдар васыяты.** | Мәҡәл, әйтем, өгөт-нәсихәт, аҡһаҡал, васыят. | 1с | | |
| 6 | **Фәстереүҙәр (уйҙырма)** | | 1 с | | |
| 7 | СабирШәрипов. **Хикмәтле хикәйә.** | Мәьэлдәй-мәьэлдәй, мөңрәй, уйһыу, һуна өйрәк, ҡыжҡылдай, Барҡылдай,ҡурҡылдай, түмәләк.һырт, лауылдай, безелдәй. | 1 с | | |
| 8 | **Уйындар. Шаярыуҙар.** | | 1 с | | |
| 9 | Айһылыу Йәғәфәрова. **Беҙ әкиәт тыңлайбыҙ.** | Йәл-ҡыҙғаныс, меҫкен-бахыр, йәш түгә-илай, яза. | 1 с | | |
| 10 | **Ҡарт менән дейеү.** | Дейеү, түмәр сөрөгө, аҡыл, хәйлә, тапҡыр. | 1 с | | |
| 11 | **Төлкө менән әтәс.** | Тауыҡ тибенә, күкрәген кирә биреп-маһайып-маҡтанып, юрый ғына. | 1 с | | |
| 12 | **Май ҡайҙа?** | Һике, әҙәм, соҡоған. | 1 с | | |
| 13 | **Төлкө менән айыу.** | Ауыҙына һыу уртлаған, һуҡрана, тонған. | 1 с | | |
| 14 | Мөхәмәт Ғабдрахманов. **Айыухас менән Айыуҡас мәктәптә.** | Бермәл, муҡсай, мәшәҡәт, төç-баш, һын килбәт, атлап – юрғалап китә, ҡарт өйәңке, сүгәләй. | 1 с | | |
| 15 | Ганс Христиан Андерсен. **Борсаҡ өҫтөндәге принцесса.** | Принц, принцесса, королева, өйләнеү. | 1 с | | |
| 16 | Мөҙәрис Мөсифуллин. **Төлкө менән ҡырмыҫҡа.** | Яфалана, интектергән, уңған, булдыҡлы, хәле мөшкөл. | 1 с | | |
| 17 | Айһылыу Ғәрифуллина. **Терпе ниңә энәле?** | Һуҫар, шәшке, ҡама, тәртәһе ҡыйшайыпҡайтҡан бала, еңмеш, ауыр холоҡ, бәләсел, вәғәҙә, Аллаһы Тәғәлә. | 1 с | | |
| 18 | **Ай  менән Зөһрә.** | Көн күрһәтмәгән – ҡаҡҡан –һуҡҡан, Ай | 1 с | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | битендәге көйәнтәле ҡыҙ. | | | |
| 19 | Ринат Хәйри. **Туп.Ҡурсағым.** | Йәрәхәтләнгән – яраланған, шым бул, ҡыҫ. | 1 с | | |
| 20 | Ноғман Мусин. **«...Сентябрь баштары».** | Күк көмбәҙе, күҙҙе ҡамаштырырлыҡ матур. | 1 с | | |
| 21 | СөләймәнМуллабаев. **Көҙгө урман.** Айһылыу Йәғәфәрова. **Көҙгө урман.** | Ҡыҙыу усаҡ, уҫаҡ. Алтын япраҡ, парашют. | 1 с | | |
| 22 | БарыйНоғоманов. **Урман китабы.** | Ынйы, таҡыр – тапалған, шыма, өрпәк ҡар – ҡырпаҡ ҡар. | 1 с | | |
| 23 | Фәйрүзә Фәтҡуллина.**Ҡарҙағы яҙыуҙар.** | Ҡор, үрғуян, өйөрмә, ҡобараһы осҡан-ҡото осҡан. | 1 с | | |
| 24 | МостайКәрим. **Ҡунаҡ беснәк.** | Беснәк, башын юғары сөйөп, түрҙән уҙ-рәхим ит. | 1 с | | |
| 25 | СөләймәнМуллабаев. **Терпе ҡунаҡ саҡырған.(Әкиәт)** | Дүрт күҙ менән көткән-түҙемһеҙләнеп көткән, көтә-көтә көтөк булған. | 1 с | | |
| 26 | АбдулхаҡИгебаев. **Урмансы малай.** | Былбыл төйәге, мурт ерек, мөһабәт имән, һомғол ҡайын. | 1 с | | |
| 27 | Салауат Кәрим. **Хәстәрлекле сәүкә.** | Хәстәр-хәстәрләү-хәстәрлекләү, | 1 с | | |
| 28 | ДанутаЦветич. **Һайыҫҡан менән һөйләшеү**. | Мәҙәк-ҡыҙыҡ, өйкөм-өйөр-төркөм-туп, зирәк-отҡор. | 1 | | |
| 29 | Салауат Кәрим. **Ярҙам.** | Мәрйен, сылбыр, тәңкә. | 1с. | | |
| 30 | РинатМөхәмәҙиев. **Яңы йыл күстәнәсе. (Мәҙәк)** | Мәке, олтан. | 1 с | | |
| 31 | ФәритИсәнғолов. **Тыңлауһыҙ сана менән саңғы.** | Һырынты башы, мәрәкә-көлкө. | 1 с | | |
| 32 | Дауыт Юлтый. **Ҡыш.** Фәрит Иҫәнғолов. **Уртаҡ ҡояш.** | Ҡар баҫҡан-ҡар япҡан, ҡура, донъя мамыҡ-донъя ап-аҡ. Емелдәй, туптай кейенгән-ҡалын кейенгән, тәпәшәк, бәхәс. | 1 с | | |
| 33 | Нәжиә Игеҙйәнова. **Бәпембә.** | Сәнскеле күлдәк, ғәжәп, йәш эркелде, ҡалтырауыҡлы тауыш. | 1 с | | |
| 34 | Венер Исхаҡов. **Үгәй инә үләне.Әрем. Кесерткән.** | Һулап туймаҫлыҡ хуш еҫ, иҫ киткес тәмле еҫ, төйләгән, телсәр ҡыҙ. | 1 с | | |
| 35 | Айһылыу Йәғәфәрова. **Сәнскеле күлдәк.** | Мәкер, зарығып көткән, әсе һүҙ. | 1 с | | |
| 36 | Тамара Ғәниева. **Томбойоҡтар**. | Таж, түңгәләктәр. | | | |
| 37 | Фәрит Иҫәнғолов. **Флүрәнең ғәйебе нимәлә?** | Тупаҫ һөйләшеү, тәмле телле, ғәйебеңде таныу. | 1 с | | |
| 38 | Гөлсирә Шафиҡова. **Зоосиныф.** Ф. Иҫәнғолов. **Ҡыҙҙар менән уйнарға яраймы** | Исем тағыу, Кире ҡағыу-ризалашыу. | 1с. | | |
| 39 | С. Яҡупов. **Кем маҡтансыҡ?** | Маҡтанды-ҡупырҙы, мәргән. | 1 с | | |
| 40 | А. Йәғәфәрова. **Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар.** | Һынап ҡарау – тикшереп ҡарау. | 1 с | | |
| 41 | **Йылан менән балыҡ. (Әрмән әкиәте)** | Диңгеҙ, аңғармай ҡалдым – күрмәй. | 1 с | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 42 | Ф. Иҫәнғолов. **Ҡәләм кемгә булырға тейеш?** | Күҙе дүрт булды-аптыраны-һушы китте. | 1 с | | |
| 43 | Г. Яҡупова. **Рәхмәт яуғанда.** | Рәхмәт уғыры – рәхмәт өшкөрө, һыңар-парһыҙ – яңғыҙ. | 1 с | | |
| 44 | А. Йәғәфәрова. **Дөйә менән ҡошсоҡ.** | Төймәләй кәүҙә тамаша, хайран ҡалды. | 1 с | | |
| 45 | Ф. Иҫәнғолов. «**Батырҙар!».** Ғ. Дәүләди. **Шапшаҡ Кинйәбай.** | Боҫто-йәшенде, лапаҫ. | 1 с | | |
| 46 | Ж. Кейекбаев. **Оморҙаҡ бабай.** | Һаҙлыҡ, әрәмә, күрән, ҡотосто, йән ерҙе –иҫебеҙгә илдек. | 1 с | | |
| 47 | Ф.Фәтҡуллина. **Мин – Батыр** | Түпәлү,шайтан оҫтахана,мазут | 1 с | | |
| 48 | **Аҡшам батыр** ҡобайыры.(Өҙөк.) **Салауат батыр** ҡобайыры | Уҡ-һаҙаҡ, билдәле булыу Бәйге-ярыш, ҡырыҫ ат йрәтелмәгәнат. | 1 с | | |
| 49 | Милли батырыбыҙ. **Салауат батыр** | Меңйәшәр | | | |
| 50 | Ф. Иҫәнғолов. **Уҡытыусы ни өсөн шелтләмәне** | Берөлгө быяла,тетмәне тетеү | 1 с | | |
| 51 | Ф.Фәтҡуллина. **Айыубикә таң баршылай. Айыу.** | Аңра,ҡолаҡһалды | 1 с | | |
| 52 | Г. Юнысова. **Сыйырсыҡ йыры.** С. Михалков. **Һөҙөшкөм килә.** | Илдәргиҙеү-сәйәхәтитеү. Бәйләнсек. | 1 с | | |
| 53 | Г. Юнысова.**Рәссам.** Г. Ситдиҡова. **Сер.** Г. Яҡупова. **Ярғанат**. | Аяҡтары ергәтейер-теймәҫ Тыңларғаәүәҫ, бошондо, күҙемә салына, ҡашығаяҡ. | 1 с | | |
| 54 | Н. Мырҙаҡаева. **Иң матур бөжәк.** | Сихырлаған, еңгәсәй. | 1 с | | |
| 55 | Й. Солтанов. **Өфөм-баш ҡалам.** Р. Янбулатова. **Өфө-баш ҡалам.** | Эшсән халыҡ, һиңә ашҡынам. | 1 с | | |
| 56 | М. Садиҡова. **Тыуған яҡтарым һәйбәт.** | Шифахана, игенсе. | 1с. | | |
| 57 | М. Кәрим. **Бөркөтлөауылы.** .Вахитова. **Алмағастар ултыртабыҙ.** | Үҙ ихтыяры менән, күҙ күрмәҫ, ҡолаҡ ишетмәҫ илдәр, тәнде ҡура. | 1 с | | |
| 58 | Ф. Иҫәнғолов. **Ҡайһылай көрәшергә.** Ә. Ихсан. **Әсә рәхмәте.** | Билеңде ҡаймыҡтырыр һың. Һабанда һайрашмаһаң. | 1 с | | |
| 59 | Р.Ниғмәтуллин. **Рәхмәттәр биргән рәхмәт.** Р. Сабитов. **Булышам.** | Тамаҡ туйғас. Туҙан ҡунмай, һиҙәп таға. | 1 с | | |
| 60 | Г.Ситдиҡова. **Күҙлек.** | Яуыз, сынаяҡ | 1 с | | |
| 61 | Ф.Иҫәнғолов. **Һин ни эшләр инең? Ысын иптәш.** | | 1 с | | |
| 62 | В.А.Сухомлинский **Поезда.** | Төшөнмәй, прожектор. | 1 с | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 63 | А.Йәғәфәрова.<br>**Көтөлмәгән осрашыу.** | Төпсөк ҡыҙы, янанылар, иҙән еге. | 1 с | | |
| 64 | В.Исхаҡов.<br>**Урман дауаһы**<br>**Бесәнгә барғанда.**<br>Хикәйә. | Теремек, күңеле кителде, мыҫҡаллап. | 1 с | | |
| 65 | Үткәнде ҡабатлау. | | 1 с | | |

## “Әҙәби уҡыу”ҙан календарь-тематик план, 4 класс

| № | Дәрес темаһы | Сәғәт һаны | Дата | |
|---|---|---|---|---|
| | | | План буйынса | Факт. |
| 1 | Һаумы мәктәп! Ф.Рәхимғолова “Белем байрамы”, С.Әлибай “Ҡояшлы китап”, Ф. Ғөбәйҙуллина “Мәктәбемә” | 1 | | |
| 2 | Ҡош – ҡанаты, кеше эше менән көслө. М.Ғафури “Ҡыр ҡаҙы” | 1 | | |
| 3 | Һуғыш михнәттәрен күргән балалар. М.Кәрим “Беҙҙең өйҙәң йәме” | 1 | | |
| 4 | Һуғыш килтергән юғалтыуҙар. М.Кәрим “Беҙҙең өйҙәң йәме” | 1 | | |
| 5 | Кеше ниөсөн йәшәй? М.Кәрим “Шулай башлана йәшәү”, “Билдәһеҙ һалдат” | 1 | | |
| 6 | Ихтыяр көсө- эшмәкәрлектең төп нигеҙе. З.Биишева “Ҡояш нимә тине?” | 1 | | |
| 7 | Ағас –емеше менән, кеше эше менән матур. З.Биишева “Йәшел йүгән” | 1 | | |
| 8 | Яманға тарыма, тарыһаң, арыма. З.Биишева “Ат һәм күгәүен”, “Ҡыш баһадир” | 1 | | |
| 9 | Дуҫтар барҙа донъя йәмлерәк. Д.Бүләков “Яңы дуҫ” | 1 | | |
| 10 | Изгелектең иртәһе-кисе юҡ. Д.Бүләков “Әлфиәнең күҙ йәштәре” | 1 | | |
| 11 | Кешенеке һиңә булмаҫ, һиңә булһа ла, уң булмаҫ. Д.Бүләков “Ҡышҡы сәскәләр” | 1 | | |
| 12 | Илдә илле дуҫың булһын. Д.Бүләков “Томбойоҡ сәскәһе” | 1 | | |
| 13 | Нимә юғарыраҡ баһалана? Д.Бүләков “Йәшел гармун” | 1 | | |
| 14 | Салауат –башҡорт халҡының милли батыры. Я.Хамматов “Салауат” (романдан өҙөк) | 1 | | |
| 15 | Аҡмулланың бала сағы. Я.Хамматов “Ҡотҡарыу” (“Һырдарья” романынан өҙөк) | 1 | | |
| 16 | Я. Хамматов ижады буйынса йомғаҡлау дәресе. | 1 | | |
| 17 | Ата-бабам баҡҡан ер, һаҡлар уны ысын ир. | 1 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | А.Игебаев”Һай тыуған ер, ғәзиз ер”, “Урал” | | | |
| 18 | Тәбиғәттең йәмен боҙма, йәнлектәрҙең йәнен ҡыйма. Н.Мусин “Етемәк болон балаһы” | 1 | | |
| 19 | Ятып ҡалғансы-атып ҡал. Н.Мусин ”Ҡарағай башында бер төн” | 1 | | |
| 20 | Солоҡ балын һуҫар ҙа ярата. Н.Мусин “Татлы тамаҡ һуҫар” | 1 | | |
| 21 | Кейектәр – тәбиғәт күрке. Н.Мусин “Ҡоралайҙар” | 1 | | |
| 22 | Тәбиғәт ҡанундарын боҙоу – оло гонаһ. Ф.Исәнғолов Өбаҫыу уртаһындағы күл” | 1 | | |
| 23 | Намыҫ, хаҡлыҡ, дуҫлыҡ. Ф.Исәнғолов “Өс малай һәм бер йәйен тураһында хикәйә” | 1 | | |
| 24 | Ат әйләнеп, төйәген табыр. Ф.Исәнғолов “Маҙаһыҙ төн” | 1 | | |
| 25 | Ҡоштар –беҙҙең дуҫтар. Ф.Исәнғолов “Урман потрулдәре” | 1 | | |
| 26 | Тыуған яғым – гүзәл төйәгем. С.Әлибай “Ҡышҡы урман”, “Алтын көҙ” | 1 | | |
| 27 | Тыуған яғым – гүзәл төйәгем. С.Әлибай “Урал ҡояшы”, “Тыуған ерем”. | 1 | | |
| 28-29 | Әкиәттә – хәҡиҡәт. А.С. Пушкин “Балыҡсы һәм балыҡ тураһында әкиәт” | 2 | | |
| 30 | Китап –белем шишмәһе. С. Михалков “Китап һөйөүсе” | 1 | | |
| 31 | Тәбиғәт –серле донъя. А. Чехов “Аҡмаңлай” | 1 | | |
| 32 | Тәбиғәт –серле донъя. В. Бианки “Кәкүк балаһы” | 1 | | |
| 33 | Алдашһаң, абруйың китер. В. Осеева “Ни өсөн?” | 1 | | |
| 34 | Һәр емештең үҙ ваҡыты. С.Панасенко “Япраҡ” | 1 | | |
| 35 | Шөкөр итәм бар булғанға. Ф.Туғыҙбаева “Икмәк”, “Бисмилла” | 1 | | |
| 36 | Ғәфү итә белеү батырлыҡ. Ф.Туғыҙбаева “Көтөлмәгән буран” | 1 | | |
| 37 | Кешене хеҙмәт матурлай. Н.Ғәйетбаев “Аҡбулат батыр” | 1 | | |
| 38 | Үҙ хеҙмәтеңдең тәмен бел, кеше хеҙмәтенең ҡәҙерен бел. Н.Ғәйетбаев “Төнгө осрашыу” | 1 | | |
| 39 | Әсәй кәңәштәре. Г.Юнысова “Әсәм һүҙҙәре”, “Тыуған ерем” | 1 | | |
| 40 | Ҡоштарҙы атма – бәләгә тарыма. Р.Байбулатов “Күгәрсендәр төйәгендә” | 1 | | |
| 41 | Тәүәккәл – таш ярыр. Р.Байбулатов “Батырлыҡ еле” | 1 | | |
| 42 | Йүнсел юлын табыр. Р.Байбулатов “Сәскәләр мажараһы” | 1 | | |
| 43 | Атанан күргән уҡ юнған, әсәнән күргән тун бескән. Р.Ғабдрахманов “Имән төбөнән сыҡҡан шар” | 1 | | |
| 44 | Хайуандарҙы йәберләгән изгелек күрмәҫ. | 1 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | Р.Ғабдрахманов “Боҙғолаҡ” | | | |
| 45 | Эшләп ашаһаң, аш тәмле була. Р.Ғабдрахманов “Ултырма ҡыҙ” | 1 | | |
| 46 | Һөнәрле һөнәренә өйрәтер. Р.Ғабдрахманов “Капитан” | 1 | | |
| 47 | Ысын дуҫлыҡ ниндәй була? Р.Ғабдрахманов ӨЫсын дуҫлыҡ” | 1 | | |
| 48 | Йомғаҡлау дәресе. Тикшереү эше. | 1 | | |
| 49 | Һынауҙар аша үткән дуҫлыҡ. М.Әхмәтшин “Бер урам малайҙары” | 1 | | |
| 50 | Үҙеңдән олонан һабаҡ ал. М.Әхмәтшин “Кәрәҙле бал” | 1 | | |
| 51 | Ҡыҙ-ҡырҡын нескә зат, ярҙам ит уға һәр саҡ. М.Әхмәтшин “Гөлйемеш” | 1 | | |
| 52 | Йәшәү көсө, тормош ҡәҙере. Ф.Аҡбулатова “Толпар ҡанатлы була” | 1 | | |
| 53-54 | Икмәк тәме –икмәк ҡәҙере. Ф.Аҡбулатова “Атай икмәге” | 2 | | |
| 55 | Онотканды тәбиғәт тә яратмай. И.Тимерханов “Шишмә” | 1 | | |
| 56 | Тура әйткән ҡотолор, алдан әйткән тотолор. И.Тимерханов “Бүре бар” | 1 | | |
| 57 | Ер еләге ерҙә бешә. С.Латыпов “Ер еләге ерҙә бешә” | 1 | | |
| 58 | Кеше булып тыуғас, кеше булып үҫ. С.Латыпов “Болан мөгөҙө” | 1 | | |
| 59 | Яман һүҙ –таш ҡаҙығы. Л.Яҡшыбаева “Кеше һүҙе” | 1 | | |
| 60 | ТОғролоҡ. Л.Яҡшыбаева “Аҡтырнаҡ” | 1 | | |
| 61 | Тикшереү эше | 1 | | |
| 62 | Татар халыҡ улы Ғ.Тукай. Ғ.Тукай “Мәҫәл”, “Бишек йырыӨ, “Шүрәле” | 1 | | |
| 63 | Француз яҙыусыһы Шарль Перро. Ш.Перро “Ҡыҙыл башлыҡ” | 1 | | |
| 64 | Бер туған Гриммдар “Бутка көршәге”, “Аҡыллы көтөүсе”, Дж.Родари “Һорауҙар” | 1 | | |
| 65 | Юлий Ванаг – латыш яҙыусыһы. Ю.Ванаг “Аҡҡош” | 1 | | |
| 66 | Йәш быуынға. А.Ҡононбаев “Йәш быуынға”, япон халыҡ әкиәте “Йәшлек шишмәһе” | 1 | | |
| 67-68 | Йомғаҡлау дәресе. | 2 | | |
| | Бөтөһе | 68 | | |